*Саралар*

# Шағирҙар өсөн байрам

Халыҡ-ара шиғриәт көнө район үҙәк китапханаһында йыл һайын шиғыр һөйләүселәр конкурсы рәүешендә үтһә, быйыл ул тәүге тапҡыр урындағы шағирҙар өсөн байрам рәүешендә ойошторолдо. Кисәнең тәүге өлөшө Әбйәлилдең күренекле шағиры Әсхәл Әхмәт-Хужа ижадына арналды. Асҡар мәктәбенән Зиниә Ғәлләмова, Ишҡолдан Мөнирә Уйылдановаларҙың уҡыусылары уның шиғырҙарын яттан һөйләне.

Кисәне ойоштороусы Венера Мәһәҙиева «Шиғриәтем минең — тормош моңо» исемле китаптар күргәҙмәһе менән таныштырҙы. Унан сарала ҡатнашыусылар ике командаға бүленеп, шиғриәт темаһына һорауҙарға ҡоролған «Алтын тирмә» уйнаны. Барыһы ла мауығып уйнаған был уйын шағирҙарға поэзияға, билдәле шағирҙарға ҡағылышлы яңы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр асырға ярҙам итте.

Сараның һуңғы бүлегендә һүҙ райондың ҡәләм оҫталарына бирелде. Асҡарҙан Зөһрә Ҡашапова, Һәйетҡолдан Вәсилә Садиҡова, Рәхмәттән Гүзәл Әхмәҙиева, Рауилдан Гүзәл Әхмәҙиева, Ҡырҙастан Иҙрис Ноғоманов, Бибиямал Йосопова үҙҙәренең әҫәрҙәрен башҡарҙы. Ә инде Хәлилдән Флүрә Низамованың шиғырҙарын ауылдашы Зөбәржәт Ғәзизова, апайы Зөһрә Усманова һөйләне, тағы бер ауылдашы Гөлшат Ғәлишина Флүрә ханымдың һүҙҙәренә ижад ителгән романсты йырлап ишеттерҙе. Арала ижад менән мауыҡҡан балалар ҙа бар ине: Рауил мәктәбенең әҙәби түңәрәгендә шөғөлләнеүселәр һәм Ҡырҙастан Зәлиә Сәғәҙәтова үҙҙәре яҙған шиғырҙарҙы уҡыны. Китапхана хеҙмәткәрҙәре кисәлә ҡатнашыусы балаларға китаптар бүләк итте һәм улар шағирҙарҙан автографтар алып ҡыуанды.

З. ҒӘЛИЕВА.